- көндәлек тормошта һә уҡыу эшмәкәрлегендә туған телде аралашыу сараһы булараҡ үҙләштереү; үҙ-ара аңлашыу һәм фекер алашыуға һәләтлелекте үҫтереү; үҙ телмәреңде камиллаштырыу; мҡһим төп уҡыу белемен һәм универсаль уҡыу хәрәкәттәрен (эшмәкәрлек маҡсаттарын аныҡ итеп әйтә белеү, уны планлаштырыу, библиографик эҙләнеү үткәреү, төрлө типтағы лингвистик һүҙлектәрҙән, сығанаҡтарҙан, Интернеттан тейешле мәҡлүмәтте һайлап алыу һәм эшкәртеү һ.б.) үҙләштереү;
- тел системаһы төҙөлөшөн һәм уның хәрәкәттә булыу законлығын үҙләштереү; стилистик ресурстарҙы һәм төп әҙәби тел нормаларын күҙәтергә өйрәнеү; анализлау, сағыштырыу, классификациялау һәм тел факттарын баһалау һәләттәрен үҫтереү; яҙма һәм һөйләү телмәрен, телмәр эшмәкәрлеге төрҙәрен, аралашыуҙың төрлө ситуацияларында телде ҡулланыу ҡағиҙәләрен, телмәр этикет нормаларын үҙләштереү; актив һәм потенциаль һүҙлек запасын байытыу; телмәрҙә грамматик сараларҙы ҡулланыу күләмен киңәйтеү; алынған белемде, күнекмәне аралашыу процесында, уҡыу эшмәкәрлегендә һәм көндәлек тормошта ҡулланыу һәләтлеген камиллаштырыу.

Уҡыусыларҙың дөйөм грамоталылығын тикшереү һәм үҫтеру өсөн төрлө характерҙағы диктанттар, шулай уҡ һүҙлек байлығын арттырыу, бәйләнешле телмәр үҫтереү, логик фекерләү дәрәжәһен камиллаштырыу маҡсатында инша һәм изложениелар яҙҙырыла.
Эш программаһы тел белеме тармаҡтары араһында системалылыҡ һәм эҙмә-эҙлелек, фәннилек, аңлайышлылыҡ принциптарын иҫкә алып төҙөлдө.

Бөгөнгө көн шарттарында башҡорт телен дәүләт теле булараҡ һаҡлап ҡалыу өсөн, белем биреүҙә һөнәри оҫталыҡ, заман талап иткәнсә юғары технологиялар, мәғлүмәт саралары менән хәбәрҙар булыуҙы талап итә.

**Уҡыу предметының йөкмәткеһе**

Ҡушма һөйләм. Ҡушма һөйләм тураһында дөйөм төшөнсә. Теҙмә ҡушма һөйләм.Теркәүесле һәм теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм. Теркәүесле һәм теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр араһында тыныш билдәләре.Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр.Баш һәм эйәрсән һөйләм.Эйәрсән һөйләмгә баш һөйләмдең эйәреү саралары. Эйәрсән һөйләм төрҙәре.Эйә һөйләм.Эйәрсән хәбәр һөйләм.Аныҡлаусы

һөйләм.Тултырыусы һөйләм.Рәүеш һөйләм. Урын һөйләм. Күләм- дәрәжә һөйләм. Сәбәп һөйләм. Маҡсат һөйләм. Шарт һөйләм. Кире һөйләм. Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәҙә тыныш билдәләре.Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр. Телмәр үҫтереү дәрестәре

**8 - се класс уҡыусыһының белем дәрәжәһенә талаптар**

**фонетика һәм  орфоэпия:**
-орфоэпик нормаларҙы һаҡлап,дөрөҫ һөйләргә;
-үҙеңдең һәм башҡаларҙың телмәрен дөрөҫ һөйләү нормаларына ярашлы анализларға;
**һүҙьяһалыш:**
-һүҙ составы буйынса анализларға;
-һүҙьяһалыш ысулдарын билдәләй белергә;
**лексикология һәм фразеология:**
-һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлата белергә;
-төрлө аңлатмалы һүҙлектәр менән ҡулланырға;
-терминдарҙы дөрөҫ ҡулланырға;
-телмәрҙе байытыусы сараларҙы ҡулланырға,текстарҙа билдәләргә;
**морфология:**
-һүҙ төркөмдәрен дөрөҫ билдәләргә;
-уларҙың телмәрҙәге ролен асыҡларға,морфологик анализ эшләргә;
**орфография:**
-орфографик ҡағиҙәләрҙе ҡуллана белергә;
-текстарҙа табып аңлатырға;
**синтаксис и пунктуация:**
-ҡушма һәм ябай һөйләмдәрҙе айырырға;
-әйтелеү маҡсатына ярашлы һөйләмдәрҙе дөрөҫ уҡырға;
-схемалар төҙөргә;
-текста тура телмәрҙе,цитаталарҙы дөрөҫ ҡулланырға;
-һөйләмдәргә синтаксик һәм пунктуацион анализ яһарға;
-тыныш билдәләренең ҡуйылышын график билдәләр,схемалар менән күрһәтергә;
**Белем һәм күнекмәләрҙе ғәмәлдә ҡулланыу:**

- анализлау, сағыштырыу, һығымталар эшләү;
- бәхәсләшеү, иҫбатлау, инҡар итеү; дискуссияла ҡатнашыу;
- иптәштәренең эштәрен баһалау;
- тема һәм микротемаларҙы бидәләү;
- диалогтар төҙөү, сығыштар әҙерләү, проекттар төҙөү;
- Интернеттан мәғлүмәттәр һайлап алыу, өҫтәлмә сығанаҡтар менән эшләү;
- “Аманат”, “Шоңҡар” журналдарына, “Йәншишмә” гәзитенә күҙәтеү яһау;
- Газета-журналдарға мәҡәләләр яҙыу.

**Календарь- тематик план**

| № | Тема | Планл. дата | Фактик дата | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|
| 1 | Синтаксис буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 4.09 | | |
| 2 | Ике составлы, тиң киҫәкле, айырымланған эйәрсән киҫәкле һөйләмдәрҙе ҡабатлау | 8.09 | | |
| 3 | Инеш һүҙҙәрҙе, хәл әйтемдәрен ҡабатлау | 11.09 | | |
| 4 | Хаталар өҫтөндә  эш. Ҡушма һөйләм. | 15.09 | | |
| 5 | Ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә | 18.09 | | |
| 6 | Ҡушма һөйләм тураһында үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 22.09 | | |
| 7 | Грамматик биремле диктант"Һай, был донъя!" | 25.09 | | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 8 | Теҙмә ҡушма һөйләмдәр. | 29.09 | | |
| 9 | Теркәүесле һәм теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр. | 2.10 | | |
| 10 | Теҙмә ҡушма һөйләмдәргә синтаксик анализ | 6.10 | | |
| 11 | Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр. | 9.10 | | |
| 12 | Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. | 9.10 | | |
| 13 | Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. ТҮ «Тәбиғәткә һоҡлана ла, уны һаҡлай ҙа бел». | 16.10 | | |
| 14 | Контроль диктант «Әсәйем юлға сыға». | 20.10 | | |
| 15 | Хаталар өҫтөндә эш. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. | 23.10 | | |
| 16 | Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр.Ҡабатлау | 6.11 | | |
| 17 | Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр. | 10.11 | | |
| 18 | Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. | 13.11 | | |
| 19 | Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр.Баш һәм эйәрсән һөйләм. | 17.11 | | |
| 20 | Эйәрсән һөйләмдең баш һөйләмгә эйәреү саралары. | 20.11 | | |
| 21 | Эйәрсән һөйләм төрҙәре. Эйә һөйләм. | 24.11 | | |
| 22 | Эйәрсән хәбәр һөйләм. | 27.11 | | |
| 23 | Аныҡлаусы һөйләм. | 01.12 | | |
| 24 | Тултырыусы һөйләм. | 04.12 | | |
| 25 | Контроль диктант. “Башҡорттар...” | 08.12 | | |
| 26 | Хаталар өҫтөндә эш.Ваҡыт һөйләм. | 11.12 | | |
| 27 | Рәүеш һөйләм. | 15.12 | | |
| 28 | Урын һөйләм. | 18.12 | | |
| 29 | Күләм - дәрәжә һөйләм. | 22.12 | | |
| 30 | Сәбәп һөйләм. Һайлама диктант. | 25.12 | | |
| 31 | Маҡсат һөйләм. | 29.12 | | |
| 32 | Шарт һөйләм. | 12.01 | | |
| 33 | Т.Ү.Инша. «Ил бәхете менән бәхетле бул, ил ҡайғыһы менән ҡайғылы» | 15.01 | | |
| 34 | Кире һөйләм. | 19.01 | | |
| 35 | Ҡушма һөйләмдәр буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 22.01 | | |
| 36<br>37 | Т.Ү.Изложение «Һунарға барыу» | 26.01<br>29.01 | | |
| 38 | Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр. | 2.02 | | |
| 39 | Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. | 5.02 | | |
| 40 | Аңлатмалы диктант. «Мәшәкәтле көндәр». | 9.02 | | |
| 41 | Хаталар өҫтөндә эш.Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр. | 12.02 | | |
| 42 | Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. | 16.02 | | |
| 43 | Теҙемдәр. | 19.02 | | |
| 44 | "Ҡушма һөйләм" темаһын ҡабатлау. | 26.02 | | |
| 45 | "Ҡушма һөйләм" темаһын ҡабатлау. | 2.03 | | |
| 46 | Һөйләм аҙағында тыныш билдәләренең ҡуйылышы. | 5.03 | | |
| 47 | Һүрәт буйынса инша. Ә. Лотфуллин. «Өс ҡатын». | 12.03 | | |
| 48 | Һөйләм аҙағында тыныш билдәләренең ҡуйылышы. | 16.03 | | |
| 49 | Өтөр ҡуйылыу осраҡтары. | 19.03 | | |
| 50 | Өйрәтеү диктанты « Бөйөк Еңеүҙең башы». | 23.03 | | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 51 | Бер нисә ябай һөйләмле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. | 26.03 | | |
| 52 | Бер нисә ябай һөйләмле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. | 6.04 | | |
| 53 | Күп эйәрсәнле эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. | 9.04 | | |
| 54 | Изложение яҙыуға әҙерлек«Саптар” | 13.04 | | |
| 55 | Изложение яҙыу «Саптар» | 16.04 | | |
| 56 | Нөктәле өтөр,һыҙыҡ ҡуйылыу осраҡтары | 20.04 | | |
| 57 | Ике нөктә ҡуйылыу осраҡтары. | 23.04 | | |
| 58 | Контроль диктант. «Күңелле ине ул саҡтар» | 27.04 | | |
| 59 | Хаталар өҫтөндә эш. Ҡатнаш ҡушма һйләмдәрҙә тыныш билдәләре.Хаталар өҫтөндә эш. | 30.04 | | |
| 60 | Теҙмә ҡушма һөйләм тур-да үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 4.05 | | |
| 61,62 | Инша «Ил яҙмышы- ир яҙмышы» | 8.05 | | |
| 63 | Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр тур-да үтелгәнд. ҡабатлау. | 15.05 | | |
| 64 | Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр тур-да үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 18.05 | | |
| 65 | Конторль диктант. «Дала кисе» | 22.05 | | |
| 66 | Хаталар өҫтөндә эш. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 25.05 | | |
| 67,68* | Ҡабатлау. | резерв* | | |

*13.10, 3.11, 23.02, 9.03 – байрам һәм ял көндәренә тура килеү сәбәпле, дәрестәр һаны ҡыҫҡартылды(ҡушылды).

**Уҡыу- уҡытыу комплекты :**

Планлаштырыуҙың нигеҙе : Башҡорт теленән программалар (V – XI кластар өсөн) – Ижевск: КнигоГрад, 2008.

Дәреслек : Абдуллина Ф.Ф., Аҡъюлова С.Б.. Әсә теле: Урта мәктәптең 8-се класы өсөн башҡорт әҙәбиәте. – Өфө: Китап, 2009.

Уҡытыусының тел буйыса уҡыу- уҡытыу методик комплекты :

1. Башҡорт теленән диктанттар йыйынтығы.Т.Я.Бикбаева – Өфө: Китап, 2008.
2. М.Ғ. Ғималова. Изложениелар өсөн текстар йыйынтығы.Өфө : Китап, 2009.
3. Р.Д.Салауатова. “ Башҡорт теле” дәреслегенә методик ҡулланма. Китап, 2012.

**9 класс**

Урта мәктәптең 9-сы класы өсөн башҡорт теленән эш программаһы.

Эш прогаммаһы 64 сәғәткә иҫәпләнгән (аҙнаға 2 сәғәт).

Эш программаһы түбәндәге документтарҙы иҫәпкә алып төҙөлә:

1. “Мәғариф тураһында” Рәсәй Федерацияһының Законы (“Закон об образовании” Закон Российской Федерации)
2. “Мәғариф тураһында” Башҡортостан Республикаһы Законы.
3. Төп дөйөм белем эстәлегенең мәжбүри минимумы (БР Мәғариф министрлығы).
4. Башҡорт теленән программалар (V – XI кластар өсөн) – Ижевск: КнигоГрад, 2008.

Башҡорт теле уҡытыуҙың төп маҡсаты:

уҡыусыларҙың туған телгә, һүҙгә булған ҡыҙыҡһыныуын һәр саҡ үҫтерә барыу, туған телдең байлығын, һүрәтләү сараларын күрһәтеү, һүҙ һәм уның формалар төрләлөгөн телмәрҙә ҡулланыуға ынтылыш тәрбиәләү, уҡыусыларҙы туған телдән ныҡлы, аңлы белем алырлыҡ итеп уҡытыу.

Башҡорт теле уҡытыуҙың төп бурыстары:

- уҡыусыларға башҡорт теленең фонетикаһынан, лексикаһынан, һүҙьяһалыш менән грамматикаһынан, стилистикаһы менән пунктуацияһынан, телдең ижтимағи тормоштағы функцияһы, телдең үҫеше хаҡында программала билдәләнгән күләмдә ныҡлы белем биреү;

- туған телгә ҡарата һөйөү, мәҙәниәт күренеше булараҡ, телгә ҡарата аңлы ҡараш тәрбиәләү; туған телдең төп аралашыу, кеше эшмәкәрлегенең төрлө сфераһынан белем алыу ҡоралы булыуын, йәмғиәттә ҡабул ителгән әхлаҡ-этик нормаларҙы үҙләштререү сараһы булыуын аңлау; туған телдең эстетик ҡиммәттәрен үҙләштереү;
- көндәлек тормошта һә уҡыу эшмәкәрлегендә туған телде аралашыу сараһы булараҡ үҙләштереү; үҙ-ара аңлашыу һәм фекер алашыуға һәләтлелекте үҫтереү; үҙ телмәреңде камиллаштырыу; мҡһим төп уҡыу белемен һәм универсаль уҡыу хәрәкәттәрен (эшмәкәрлек маҡсаттарын аныҡ итеп әйтә белеү, уны планлаштырыу, библиографик эҙләнеү үткәреү, төрлө типтағы лингвистик һүҙлектәрҙән, сығанаҡтарҙан, Интернеттан тейешле мәғлүмәтте һайлап алыу һәм эшкәртеү һ.б.) үҙләштереү;
- тел системаһы төҙөлөшөн һәм уның хәрәкәттә булыу законлығын үҙләштереү; стилистик ресурстарҙы һәм төп әҙәби тел нормаларын күҙәтергә өйрәнеү; анализлау, сағыштырыу, классификациялау һәм тел факттарын баһалау һәләттәрен үҫтереү; яҙма һәм һөйләү телмәрен, телмәр эшмәкәрлеге төрҙәрен, аралашыуҙың төрлө ситуацияларында телде ҡулланыу ҡағиҙәләрен, телмәр этикет нормаларын үҙләштереү; актив һәм потенциаль һүҙлек запасын байытыу; телмәрҙә грамматик сараларҙы ҡулланыу күләмен киңәйтеү; алынған белемде, күнекмәне аралашыу процесында, уҡыу эшмәкәрлегендә һәм көндәлек тормошта ҡулланыу һәләтлеген камиллаштырыу.

Уҡыусыларҙың дөйөм грамоталылығын тикшереү һәм үҫтерү өсөн төрлө характерҙағы диктанттар, шулай уҡ һүҙлек байлығын арттырыу, бәйләнешле телмәр үҫтереү, логик фекерләү дәрәжәһен камиллаштырыу маҡсатында инша һәм изложениелар яҙҙырыла.

Эш программаһы тел белеме тармаҡтары араһында системалылыҡ һәм эҙмә-эҙлелек, фәннилек, аңлайышлылыҡ принциптарын иҫкә алып төҙөлдө.

Лингвистик компетенция йәмғиәт күренеше булараҡ, тел тураһында тейешле белемде үҙләштереү нигеҙендә уның төҙөлөшөн, үҫешен, хәрәкәттә булыуын формалаштырыуҙы аңлата; башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын үҙләштереү; һүҙлек запасын һәм уҡыусы телмәренең грамматик төҙөлөшөн байытыу; фән булараҡ, лингвистика тураһында тейешле белем, уның төп бүлектәренә кәрәкле булған тел күренеше факттарын анализлау һәм баһалау мөмкинлектәрен формалаштырыу; төрлө лингвистик һүҙлектәрҙе ҡуллана белеү.

Аралашыу (коммуникатив) компетенциһы ул – башҡалар әйткәнде аңлау һәм үҙ фекереңде белдереү өсөн тупланган белем, оҫталыҡ, күнекмәләр йыйылмаһы; хәҙерге башҡорт теле нормаларына эйә булыу, һүҙ байлығын, һөйләмдең грамматик яғын дөрөҫ итеп үҙләштереү; телдән һәм яҙма формала бәйләнешле һөйләү күнекмәләрен булдырыу һ.б. Коммуниктаив компетенция аралашыуҙың маҡсатын билдәләй, телмәр ситуацияһын баһалай белеүҙе, аралашыусының коммуникация ысулдарын һәм ниәттәрен иҫәпкә алыуҙы, адекват стратегик аралашыуҙы һайлауҙы һәм үҙ телмәреңде аңлы рәүештә үҙгәртеүгә әҙер булыуҙы күҙ уңында тота.

Мәҙәни (этнокультура өлкәһенә ҡараған) компетенция туған телдең мәҙәниәтен сағылдырыусы форма булараҡ аңлауҙы күҙ уңында тота, тел һәм халыҡ тарихының бәйләнештә булыуын, башҡорт теленең милли- мәҙәни үҙенсәлеген, башҡорт телмәр этикет нормаларын үҙләштереүҙе, милли-мәҙәни компетентлы һүҙҙәр мәғәнәһен аңлатыуҙы белдерә.

| № | Темалар | Үтк ваҡыты | Фактик дата | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|
| 1 | Инеш дәрес. Тел тураһында дөйөм төшөнсә. | 3.09 | | |
| 2 | Тел – үҫә барыусы ижтимағи күренеш. | 8.09 | | |
| 3 | Башҡорт теле – башҡорт халҡының милли теле. | 10.09 | | |
| 4 | Әҙәби тел һәм диалект. | 15.09 | | |
| 5 | Башҡорт теленең диалекттары. | 17.09 | | |
| 6 | Башҡорт теле башҡа ҡәрҙәш телдәр араһында. | 22.09 | | |
| 7 | Башҡорт әҙәби теле һәм уның үҫеше. | 24.09 | | |
| 8 | Ике теллелек. | 29.09 | | |
| 9 | Инеш диктант. | 1.10 | | |
| 10 | Башҡорт теленең стилдәре. | 6.10 | | |
| 11 | Йәнле һөйләү стиле. Автобиография.Матур әҙәбиәт стиле. Белдереү. | 8.10 | | |
| 12 | Изложениеға әҙерлек.“Килен төшөрөү”. | 15.10 | | |
| 13 | Изложение яҙыу.“Килен төшөрөү”. | 20.10 | | |
| 14 | Фәнни стиль. Аннотация. | 22.10 | | |
| 15 | Публицистик стиль. Мәҡәлә. | 5.11 | | |
| 16 | Рәсми эш ҡағыҙҙары стиле. Протокол. | 10.11 | | |
| 17 | Хаттар стиле. Акт. | | | |
| 18 | Рецензия. | 12.11 | | |
| 19 | Контроль диктант. “*Икмәк хаҡы”.* | 17.11 | | |
| 20 | Хаталар өҫтөндә эш. Һүрәтләү саралары. | 19.11 | | |
| 21 | Сағыштырыу. | 24.11 | | |
| 22 | Метафора. | 26.11 | | |
| 23 | Эпитет. | 1.12 | | |
| 24 | Т.ү. “*Икмәк”* инша. | 3.12 | | |
| 25 | Синонимдар, уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. | 8.12 | | |
| 26 | Һүҙлектәр менән эш. | 10.12 | | |
| 27 | Грамматик синонимдар. | 15.12 | | |
| 28 | Антитеза | 17.12 | | |
| 29 | Контроль диктант. *“Район башлығы”.* | 22.12 | | |
| 30 | Хаталар өҫтөндә эш. Һүҙҙе һәм уның формаларын телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу | 24.12 | | |
| 31 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Фонетиканы ҡабатлау. | 29.12 | | |
| 32 | 5-9-сы класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Фонетиканы ҡабатлау. | 12.01 | | |
| 33 | 5-9-сы класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Фонетиканы ҡабатлау. | 14.01 | | |
| 34 | 5-9-сы класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Фонетиканы ҡабатлау. | 19.01 | | |
| 35 | Лексикология.Синонимдар. Омонимдар.Антонимдар. | 21.01 | | |
| 36 | Диалект һүҙҙәр. Архаизмдар. | 26.01 | | |
| 37 | Лексиканың стилистик ҡатламдары | 28.01 | | |
| 38 | Фразеология.Афоризмдар. Фразеологик һүҙлектәр. | 2.02 | | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 39 | Лексиканы ҡабатлау. | 4.02 | | |
| 40 | Башҡорт теленең һүҙлектәре. | 9.02 | | |
| 41 | Изложение. “Ҡәнифә юлы” | 11.02 | | |
| 42 | Изложение.“Ҡәнифә юлы” | 16.02 | | |
| 43 | Морфемика.Һүҙьяһалышты ҡабатлау. | 18.02 | | |
| 44 | Һүҙъяһалыштың төп ысулдары | 25.02 | | |
| 45 | Синтаксис һәм пунктуацияны ҡабатлау. | 2.03 | | |
| 46 | Һүҙбәйләнеш.Һүҙбәйләнеш төрҙәре. | 4.03 | | |
| 47 | Һөйләм.Һөйләм төрҙәре | 11.03 | | |
| 48 | Ике составлы. Бер составлы һөйләмдәр | 16.03 | | |
| 49 | Тарҡау һәм йыйнаҡ һөйләмдәр | 18.03 | | |
| 50 | Контроль диктант. *“Йыр йөрәкле егет”* | 23.03 | | |
| 51 | Хаталар өҫтөндә эш. Тулы һәм кәм һөйләмдәр | 25.03 | | |
| 52 | Инеш һүҙ. Инеш һөйләм | 6.04 | | |
| 53 | Хаталар өҫтөндә эш. | 8.04 | | |
| 54 | Ҡушма һөйләмдәр. | 13.04 | | |
| 55 | Орфография. Морфема. | 15.04 | | |
| 56 | Орфографик һүҙлектәр һәм белешмәләр. | 20.04 | | |
| 57 | Пунктуация. | 22.04 | | |
| 58 | Тыныш билдәләре һәм уларҙың фунциялары. | 27.04 | | |
| 59 | Инша “Дуҫлыҡ” | 29.04 | | |
| 60 | Тура телмәр һәм цитата. | 4.05 | | |
| 61 | Телдә халыҡ ижады һәм мәҙәниәте тарихының сағылышы. | 6.05 | | |
| 62, 63 | Контроль изложение. | 13.05 | | |
| 64 | Үтелгәнде ҡабатлау. | 18.05 | | |
| 65 | Контроль диктант *“ Хәтер”* | 20.05 | | |
| 66 | Хаталар өҫтөндә эш. Ҡабатлау. | 25.05 | | |

Уҡыу- уҡытыу комплекты :

Планлаштырыуҙың нигеҙе : 4. Башҡорт теленән программалар (V – XI кластар өсөн) – Ижевск: КнигоГрад, 2008.

Дөреслек : Псәнчин В.Ш. Башҡорт теле: Дөйөм урта белем биреү учреждениеларының 9-сы класы өсөн.-Өфө:Китап, 2020.

Уҡытыусының тел буйыса уҡыу- уҡытыу методик комплекты :

1. Башҡорт теленән диктанттар йыйынтығы.Т.Я.Бикбаева – Өфө: Китап, 2008.
2. М.Ғ. Ғималова. Изложениелар өсөн текстар йыйынтығы.Өфө : Китап, 2009.

**10 класс**

Аңлатма яҙыу

10- сы класта эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған уҡытыу башҡорт телендә алып барылған мәктәптәрҙең V-XI кластары өсөн башҡорт теле программаһы (Төҙөүселәре: Псәнчин В.Ш., Псәнчин Ю.В., “Книгоград”, 2008) нигеҙендә төҙөлдө.

Программа муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының « Уҡыу планы»на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла. Уҡыу планы буйынса башҡорт теленә аҙнаға 1 сәғәт бүленгән, йылына 10 – сы класта- 34,

Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла:

«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы, Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы, Башҡортостан Республикаһында Милли мәғарифты үҫтереү концепцияһы.

Программа йөкмәткеһе 3 йүнәлештән тора:

-  башҡортса телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу һәм камиллаштырыу;
-  башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик үҙенсәлектәрен аңлау һәм үҙләштереү; бәйләнешле текст менән эш итә белергә өйрәтеү.

Дәреслек. “Башҡорт теле. 10-11-се класс” Псәнчин В.Ш., Псәнчин Ю.В., Өфө, 2020

Программала ҡуйылған маҡсат һәм бурыстар:

-Уҡыусыларҙың туған телгә, һүҙгә булған ҡыҙыҡһыныуын үҫтереү, туған телдең байлығын, төрлө һүрәтләү сараларын күрһәтеү, һүҙ һәм уның формалар төрлөлөгөн телмәрҙә ҡулланырға ынтылыш тәрбиәләү;

-Уҡыусыларҙың грамоталы яҙыу һәм әҙәби тел нормаларын күҙәтеп һөйләү телмәрен үҫтереү;

-Тел факттарын сағыштырып, төркөмләп, фонетик, морфологик , синтаксик, орфографик, пункуацион һәм башҡа төрлө анализ яһау барышында теоретик белешмәләрҙе үҙләштереүҙәренә ирешеү;

-Уҡыусыларҙың фекерләүен, танып-белеү һәләтлелеген үҫтереү;

-Уҡыусыларҙа әсә теленең һүҙ байлығына һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү;

-Телдең орфоэпик, интонацион нормаларын күҙәтеп, дөрөҫ, асыҡ һәм тасуири уҡырға өйрәтеү;

-Башҡорт теленең байлығын, тасуирлау мөмкинлектәрен асыу аша туған телде өйрәнеүгә әүҙем ҡыҙыҡһыныу, туған телгә, туған халыҡҡа, Ватанға тоғролоҡ һәм һөйөү, ғәҙеллек, донъяға киң ҡараш, кешеләр араһында татыулыҡ, ата-әсәгә, туған халыҡтың быуаттар буйына туплаған тормош ҡағиҙәләренә , әхлаҡ нормаларына хөрмәт тәрбиәләү.

10-сы класс уҡыусылары белергә тейеш төшөнсәләр:

- йәмғиәт тормошонда телдең роле, туған телдең әһәмиәте, йәмғиәт үҫешендәре роле, ижтимағи әһәмиәтен аңлыҡабул итеү;
- ябай, ҡушма һөйләм синтаксисын, стилистикаһын иркен файҙалана белеү, уларҙа ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең әһәмиәтен билдәләү;
- тыныш билдәләре, текст, һөйләм интонацияһы, телмәр тибын аңлы ҡабул итеү;
- һүҙбәйләнеш, ябай, ҡушма һөйләм, тура телмәр, диалог, айырымланыу күренештәре менән эш итә белеү;
- теҙмә һәм эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр, уларҙың схематик бирелеше, айыра һәм телмәрҙә ҡуллана белеү;
- ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр һәм уларҙың грамматик бирелеше;
- бөтә төр анализдар:фонетик, лексик, морфологик, һүҙьяһалыш, синтаксик, стилистик анализдарҙы үтәү;
- орфоэпия, графика, офография ҡағиҙәләре;

- текст һәм уның эсендәге һөйләмдәр, уларҙың стилдәре;
- телмәр төрҙәре (типтары) буйынса анализдар;
- һүрәтләү сараларын текстан таба белергә һәм ҡулланырға тейеш, башҡорт теленең һүҙлек байлығын белергә тейеш.

1. Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була.
2. Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.
3. Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә.

Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.
Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана.

Уҡыу предметын үҙләштереүҙең шәхсән, метапредмет, предмет һөҙөмтәләре

Башҡорт теле программаһын үҙләштереүҙең шәхсән һөҙөмтәләре:
1)Башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли - мәҙәни ҡиммәттәре булараҡ аңлау,интеллектуаль, ижади һәләттәрен һәм шәхестең мораль - этик сифаттарын үҫтереүҙә туған телдең ролен, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;
2)Башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау; туған телгә ҡарата ихтирам, һөйөү, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; милли - мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү; үҙ телмәреңде камиллаштырыуға ынтылыу;
3)Аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү өсөн тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү; үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәһен булдырыу. Төп дөйөм белем биреү мәктәбенең сығарылыш уҡыусыларының башҡорт теле программаһын үҙләштереүҙә шәхси һөҙөмтәләре булып түбәндәгеләр тора:
1)Башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли - мәҙәни ҡиммәттәре булараҡ аңлау,интеллектуаль, ижади һәләттәрен һәм шәхестең мораль - этик сифаттарын үҫтереүҙә туған телдең ролен, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;
2)Башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау; туған телгә ҡарата ихтирам, һөйөү, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; милли - мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү; үҙ телмәреңде камиллаштырыуға ынтылыу;
3)Аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү өсөн тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү; үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәһен булдырыу.

Башҡорт телен үҙләштереүҙең метапредмет һөҙөмтәләре:
1)телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҙләштереү: аудирование һәм уҡыу:
*телдән һәм яҙма бирелгән мәғлүмәтте (коммуникатив йүнәлеш, теке темаһы, төп фекер; төп һәм өҫтәлмә мәғлүмәт) адекват ҡабул итеү;
*төрлөсә уҡыу күнекмәләрен булдырыу (эҙләнеү, ҡарап сығыу, танышыу, өйрәнеү);төрлө стилдәге, жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү;
*төрлө стилдәге һәм жанрҙағы тексты ишетеп, адекват ҡабул итеү;аудирование менән эш итеү(һайлап алыу, танышыу);
*төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу һәләтлелеге (матбуғат саралары, уҡыу өсөн тәғәйенләнгән компакт -дискылар, Интернет ресурстары); төрлө типтағы һүҙлектәр менән иркен ҡулланыу; белешмә өсөн әҙәбиәт, шулай уҡ электрон ҡулланмаларҙан һайлап алыу күнекмәһен булдырыу;
*һайлап алыу алымдары менән эш итә белеү һәм тәғәйен темаға материалды системаға килтереү; уҡыу йә аудирование һөҙөмтәһендә алынған мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекмәләренә эйә булыу; мәғлүмәтте ҡайтанан эшләй алыу, еткерә белеү;
*стилистик үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алып, йөкмәткенән һәм ҡулланылған тел сараларынан

сығып, фекерҙе сағыштыра алыу; һөйләү һәм яҙыу:
*алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең ( индивидуаль һәм коллектив) маҡсатын билдәләү
һәләтлелеге, эштең эҙмә -эҙлелеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау, уларҙы телдән һәм яҙма формала адекват аныҡ итеп әйтеү;
*тыңлаған йәки уҡылған тексты тәҡдим ителгән кимәлдә( план, һөйләү, конспект, аннотация) һөйләй алыу;
*төрлө телмәр стилендә һәм төрлө жанрҙарҙа аралашыу ситуацияһына ҡарап телдә һәм яҙма текст төҙөй алыу; *телдән һәм яҙма формала үҙ фекереңде иркен еткерә белеү, текст логик яҡтан эҙмә – эҙ лекле төҙөү талаптарын һаҡлау;
*төрлө төрҙәге монологты (хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү; төрлө төрҙәге монологтарҙың берләшеүе) һәм диалогты (этикетты үҙ эсенә алған, диалог - һорашыу, диалог - аралашыуға өндәү, диалог - фекер алышыу һ. б.; төрлө төрҙәге диалогтың берләшеүе) үҙләштереү;
*ғәмәлдә төрлө телмәрҙәге аралашыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең стилистк нормаларын һәм яҙма телдә төп орфографик һәм пунктуацион ҡағиҙәләрҙе һаҡлау;
*телмәр этикет нормаларын һаҡлау, аралаша алыу,телмәр аралашыу процесында ым - ишара, мимиканы урынлыҡулланыу;
*уҡыу процесында һәм көндәлек аралашыуҙа үҙ телмәреңде контролдә тота алыу;
йөкмәткенән, һүҙҙәрҙе урынлыҡулланыуҙан сығып,үҙ телмәреңде баһалай белеү;грамматик һәм телмәр хаталарын таба, уларҙы төҙәтә алыу; үҙ тексыңды мөхәррирләү һәм камиллаштыра белеү;
*үҙ тиңдәштәрең аудиторияһында ҙур булмаған доклад, реферат менән сығыш яһау; бәхәстә, төрлө аргументтарҡулланып, көнүҙәк проблемалар буйынса сығыштарҙа ҡатнашыу;
2) алынған белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡуллана белеү; туған телде башҡа төрлө фәндәрҙән белем алыу сығанағы булараҡ файҙаланыу; тел күренештәрен анализлау буйынса алған белем һәм күнекмәләрҙе предмет - ара (сит тел, әҙәбиәт һ. б. дәрестәрҙә) ҡулланыу;
3)аралашыу процесында тирә - яҡтағы кешеләр менән коммуникатив маҡсатлы бәйләнештә, ниндәйҙер эш төрөн бергә эшләү, бәхәстә, күтәрелгән көнүҙәк темаларҙа фекер алышыуҙа ҡатнашыу; формаль һәм формаль булмаған шәхестәр менән мәҙәни аралашыу барышындағы төрлө ситуацияларҙа телмәр этикетының милли – мәҙәни нормаларын үҙләштереү.
Предмет һөҙөмтәләре:
1)телдең төп фукциялары тураһында, башҡорт теленең башҡорт халҡының милли теле, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булыуы тураһында, тел һәм халыҡ мәҙ әниәтенең бәйләнештәре тураһында, туған телдең кеше һәм йәмғиәт тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;
2)гуманитар фәндәр системаһында туған телдең урынын һәм мәғарифтә тулыһынса уның ролен аңлау; 3)туған тел тураһында төп фәнни нигеҙҙе үҙләштереү; уның кимәл һәм берәмектәр бәйләнешен аңлау;
4)тел ғилеменең төп аңлатмалары: лингвистика (тел ғилеме) һәм уның төп бүлектәре; тел һәм телмәр, телмәр аралашыуы, һөйләү һәм яҙма телмәр, монолог,диалог һәм уларҙың төр ҙәре; аралашыу ситуациялары. Фәнни, публицистик, рәсми - эшлекле стилдәр, матур әҙәбиәт теле; функциональ - мәғәнәүи телмәр төрҙәре ( хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү); текст, текст төрҙәре, телдең төп берәмектәре, уларҙың билдәләре һәм телмәрҙә ҡулланыу үҙенсәлектәрен үҙләштереү;
5)башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһының төп стилистик ресурстарын. Башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын, һөйләү этикет нормаларын үҙләштереү;
6)телдең төп берәмектәрен, граматик категорияларын анализлау һәм таныу, тел берәмектәрен аралашыу шарттарына ярашлы ҡулланыу; 7)һүҙгә төрлө анализ яһау төрҙәрен ( фонетик, морфематик, һүҙьяһалыш, лексик,морфологик), һөйләм һәм һүҙбәйләнешкә синтаксик анализ, төп билдә һәм структура күҙлегенән сығып, күп аспектлы анализ яһау; 8)тел - һүрәтләү саралары һәм уларҙы уҡыусы телмәрендә ҡулланыу;

| № | Бүлек, дәрестең темаһы | Үткәреү ваҡыты | | Иҫкәр мә |
|---|---|---|---|---|
| | | Планлаштырыу | Фактик | |
| 1 | Тел-ижтимағи һәм социаль күренеш.Телдең төп | 2.09 | | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | вазифалары. | | | |
| 2 | Телден берәмектәре, уларҙың системаһы | 9.09 | | |
| 3 | Әҙәби тел. Әҙәби телдең нормалаштырылған булыуы | 16.09 | | |
| 4 | Инша “Тыуған яғым- алтын бишегем” | 23.09 | | |
| 5 | Лексика.Телмәр мәҙәниәте. Һүҙҙәрҙен стилистик ҡатламдары. | 30.09 | | |
| 6 | Фразеолик берәмектәрҙең төп билдәләре Биремле диктант “ Шүлгән мәмерйәһе” | 7.10 | | |
| 7 | Контроль диктант “ Ер майының тарихы” | 14.10 | | |
| 8 | Омоним,Антоним.Синонимдар. | 21.10 | | |
| 9 | Орфоэпия. Графика. | 11.11 | | |
| 10 | Өндәр.Калькалар | 18.11 | | |
| 11 | Аңлатмалы диктант” Халыҡ хәтере” | 25.11 | | |
| 12 | Хаталар өҫтөндә эш. Һүҙьяһалыш. | 2.12 | | |
| 13 | Изложение” Өмөт бөрөләре” | 9.12 | | |
| 14 | Һүҙьяһалыш.Морфема һәм уларҙың төрҙәре. | 16.12 | | |
| 15 | Ҡабатлау дәресе. | 23.12 | | |
| 16 | Һүҙьяһалыш ысулдары. | 30.12 | | |
| 17 | Исем.Уның телмәрҙә ҡулланышы. | 13.01 | | |
| 18 | Исемдәрҙең килештәр менән үҙгәреше | 20.01 | | |
| 19 | “Исем” темаһын ҡабатлау. | 27.01 | | |
| 20 | Б.Т.Ү. Изложение” Буранбай” | 3.02 | | |
| 21 | Сифат.Унын телмәрҙә ҡулланышы. | 10.02 | | |
| 22 | Б.Т.Ү. Инша “ Тәүге ҡар” | 17.02 | | |
| 23 | Һан.Уның телмәрҙәҡулланышы | 24.02 | | |
| 24 | Алмаш.Уның телмәрҙә ҡулланышы | 3.03 | | |
| 25 | Ҡылым.Уның телмәрҙә кулланышы | 10.03 | | |
| 26 | Ҡылымдарҙын лексик-семантик төркөмдәргә бүленеүе. | 17.03 | | |
| 27 | Ҡылымдарҙың төп грамматик категориялары Б .Т.Ү. Инша“ Яҙ һулышы” | 24.03 | | |
| 28 | Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар.<br>Күсемле һәм күсемһеҙ ҡылымдар. | 07.04 | | |
| 29 | Йүнәлеш категорияһының төрҙәре.<br>Анлатмалы диктант “ Хәтер ҡылыу” | 14.04 | | |
| 30 | Ҡылым төркөмсәләре | 21.04 | | |
| 31 | Ҡылым модаллеге (рәүешлеге).Ҡылым күләмдәре. | 28.04 | | |
| 32 | Контроль диктант”Туган тел ” | 05.05 | | |
| 33 | Хаталар өҫтөндә эш. Ҡабатлау. | 12.05 | | |
| 34 | Резерв дәрес | 26.05 | | |

*Йыллыҡ планда 33 сәғәт урынына 34 сәғәт . Бер сәғәт резерв.

Ҡулланылған әҙәбиәт:


Башҡорт теле:укытыу туған ( башҡорт телендә алыпбарылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 10-11 кластары өсөн укыу ҡуланмаһы.5-се баҫма//В.Ш.Псәнчин, Ю.В.Псәнчин/.-Өфө: Китап,2018.-328бит.

Ғ.Ғ.Сәитбатталов. Башҡорт теле.1том.Ябай һөйләм синтаксисы. –Өфө: Башҡортостан” Китап “нәшриәте.1999.-352 бит.

**11 класс**

Уҡытыу башҡорт телендә алып барылған мәктәптәрҙең 11-сы класы өсөн башҡорт теленән эш программаһы.

Эш программаһы 33 сәғәткә иҫәпләнгән (аҙнаға 1 сәғәт). Планлаштырылған сәғәттәр һаны-30. Дәрестәр байрам көнөнә тура килеү сәбәпле,темалар берләштерелде*.

Программа үҙенсәлектәренең характеристикаһы:

Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған уҡытыу башҡорт телендә алып барылған мәктәптәрҙең V-XI кластары өсөн башҡорт теле программаһы (Төҙөүселәре: Псәнчин В.Ш., Псәнчин Ю.В., “Китап”, 2008) нигеҙендә төҙөлгән.

Программа Комсомольск урта дөйөм белем биреү мәктәбе муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының « Уҡыу планы»на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла.

**Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла:**

«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы, Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы, Башҡортостан Республикаһында Милли мәғарифты үҫтереү концепцияһы.

**Программа йөкмәткеһе 3 йүнәлештән тора:**

- башҡортса телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу һәм камиллаштырыу;
- башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик үҙенсәлектәрен аңлау һәм үҙләштереү;
- бәйләнешле текст менән эш итә белергә өйрәтеү.

**Программала ҡуйылған маҡсат һәм бурыстар:**

1. уҡыусыларҙың туған телгә, һүҙгә булған ҡыҙыҡһыныуын үҫтереү, туған телдең байлығын, төрлө һүрәтләү сараларын күрһәтеү, һүҙ һәм уның формалар төрлөлөгөн телмәрҙә ҡулланырға ынтылыш тәрбиәләү;
2. уҡыусыларҙың грамоталы яҙыу һәм әҙәби тел нормаларын күҙәтеп һөйләү телмәрен үҫтереү;
3. тел факттарын сағыштырып, төркөмләп, фонетик, морфологик , синтаксик, орфографик, пунктуацион һәм башҡа төрлө анализ яһау барышында теретик белешмәләрҙе үҙләштереүҙәренә ирешеү;
4. уҡыусыларҙың фекерләүен, танып-белеү һәләтлелеген үҫтереү;
5. уҡыусыларҙа әсә теленең һүҙ байлығына һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү;
6. телдең орфоэпик, интонацион нормаларын күҙәтеп, дөрөҫ, асыҡ һәм тасуири уҡырға өйрәтеү;
7. башҡорт теленең байлығын, тасуирлау мөмкинлектәрен асыу аша туған телде өйрәнеүгә әүҙем ҡыҙыҡһыныу, туған телгә, туған халыҡҡа, Ватанға тоғролоҡ һәм һөйөү, ғәҙеллек, донъяға киң ҡараш, кешеләр араһында татыулыҡ, ата-әсәгә, туған халыҡтың быуаттар буйына туплаған тормош ҡағиҙәләренә , әхлаҡ нормаларына хөрмәт тәрбиәләү.

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе**

-Тел һәм телмәр, телдең төп вазифалары, башҡорт теленең ижтимағи функциялары; донъя телдәре, башҡорт теленә ҡәрҙәш телдәр, үле һәм тере телдәр, тәбиғи һәм яһалма телдәр;

-телдең берәмектәре, уларҙың системаһы; тел тураһындағы фәндең төп бүлектәре, телмәр төрҙәре;

-әҙәби тел, башҡорт теленең дөрөҫ әйтелеш нормалары, синекдоха, һүҙ эсендәге баҫым, интонацион саралар: мелодика, логик баҫым, паузалар, әйтелеш темпы; синтагма;

-лексика, лексик һәм грамматик мәғәнә, һүҙҙең күп мәғәнәлелеге, ккүп мәғәнәлелек типтары: метафора, метонимия, синекдоха, перифраз, эвфемизм, аллегория; омонимдар, омонимдарҙың

типтары; синонимдар, синонимик рәттәр, синонимдарҙың төрҙәре; антонимдар, антонимдарҙың төрҙәре; килеп сығышы яғынан башҡорт теленең лексикаһы; актив һәм пассив һүҙҙәр;

-һүҙҙәрҙең стилистик ҡатламдары: нейтраль һүҙҙәр, йәнле һөйләү стиленә ҡараған һүҙҙәр, китап стиле һүҙҙәре;

-фразеология, фразеологик берәмектәрҙең төп билдәләре, телмәрҙә ҡулланылышы;

-телмәрҙең фонетик бүленеше: фраза, такт, ижек, өн; һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр, Һуҙынҡы өндәр өлкәһендәге үҙгәрештәр: редукция, элизия, протеза, эпентеза; тартынҡыларҙың ассимиляцияһы: прогрессив ассимиляция, регрессив ассимиляция; тартынҡыларҙың диссимиляцияһы; аңҡау гармонияһы, ирен гармонияһы;

-орфоэпия һәм орфография; һуҙынҡы һәм -өндәрҙең ярашыуы; дифтонгылар;

-графика һәм орфография, алфавит, обашҡорт телендәге орфографик нормалар;

-һүҙьяһалыш, морфема һәм уның төрҙәре: тамыр, ялғауҙар (һүҙ яһаусы ялғау, форма яһаусы ялғау, үҙгәртеүсе ялғау);

-һүҙьяһалыш ысулдары: лексик-семантик һүҙьяһалыш, фонетик һүҙьяһалыш, морфологик һүҙьяһалыш, лексик-грамматик һүҙьяһалыш, лексик-синтаксик һүҙьяһалышм;

-морфология, грамматик мәғәнә, грамматик категория, грамматик формалар; һүҙ төркөмдәре, үҙ аллы һүҙ төркөмдәре: исем, сифат, һан, алмаш, ҡылым, рәүеш,; ярҙамсы һүҙ төркөмдәре: теркәүестәр, бәйләүестәр, киҫәксәләр; модаль һүҙҙәр, ымлыҡтар, оҡшатыу һүҙҙәре, саҡырыу һүҙҙәре;

-исем, исемдең лексик-грамматик разрядтары, төркөмсәләре, һан категорияһы, эйәлек категорияһы, хәбәрлек категорияһы; стилистик мөмкинселектәре; килештәр менән үҙгәреше;

-сифат, сифаттың лексик-грамматик мәғәнәһе, сифаттарҙың исем урынында ҡулланыла алыуы, төп һәм шартлы сифаттар, сифат дәрәжәләре, сифаттарҙың телмәрҙәге стилистик мөмкинселектәре,

-һан, һандың лексик-грамматик мәғәнәһе, һан төркөмсәләре, , исемләшкәндә һандарҙың килеш, һан, эйәлек категориялары менән үҙгәреүе, һандарҙың дөрөҫ яҙылышы, нумератив һүҙҙәр;

-алмаш, алмаштарҙың лексик-грамматик мәғәнәһе, алмаштарҙың төркөмсәләре, алмаштарҙың төрлө һүҙ төркөмдәрен алмаштыра алыуы, алмаштарҙың башҡа һүҙ төркөмдәренә күсә алыуы, алмаштарҙың һөйләмдәге функциялары һәм уларҙы стилистик файҙаланыу, алмаштарҙың һөйләмдәрҙе бер-береһенә бәйләү сараһы булып килеүе;

-ҡылым, ҡылымдарҙы лексик-семантик төркөмдәргә бүлеү (хәрәкәт ҡ., эшмәкәрлек ҡ., хәл-торошто белдереүсе ҡ., хис-тойғоно белдереүсе ҡ., фекер йөрөтөү ҡ., әйтеү-һөйләү ҡ.; зат менән үҙгәреүсе ҡылымдар, зат менән үҙгәрмәүсе ҡылымдар, үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар, күсемле һәм күсемһеҙ ҡылымдар, һөйкәлеш категорияһы, барлыҡ-юҡлыҡ категорияһы, йүнәлеш категорияһы; ҡылым төркөмсәләре, ҡылым күләмдәре, , ҡылым модаллеге (рәүешлеге) категориялары.

**Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар**

- һүҙ төркөмдәрен һәм уларҙың грамматик билдәләрен таныу;
- -һүҙҙең төрлө формаларын дөрөҫ итеп ойоштороу;
- -синонимик мәғәнәләрҙе сағылдырыуҙа төрлө һүҙ төркөмдәре менән файҙалана белеү;
- -текст эсендәге һөйләмдәрҙә төрлө һүҙ төркөмдәрен дөрөҫ ҡуллана белеү;
- -төрлө һүҙ төркөмөнә ҡараған һүҙҙәрҙе һәм уларҙың формаларын, аралашыу шартына һәм телмәрҙең стиленә ҡарап ҡуллана белеү;
- - төрлө һүҙ төркөмөнә ҡараған һүҙҙәрҙең аффикстарын, үҙгәртеүсе ялғауҙарын дөрөҫ яҙыу;
- -текста урынһыҙ ҡабатланып килгән һүҙ һымаҡ хаталарҙы төҙәтеү;
- -тексттың орфографик яҡтан дөрөҫлөгөн тикшереү һәм тыныш билдәләре йәһәтенән төҙөк итеп редакторлау;

- -иншаға һәм телдән сығыш яһау өсөн үҙ аллы материалдар таба, тупланған материалды системаға һала белеү;
- -төрлө гәзит материалдарын файҙаланып, үҙ-ара бәйләнешле текст төҙөү.

Уҡыу-уҡытыу программаһында планлаштарылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштерелеүен баһалау

1. Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була.
2. Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.
3. Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

- Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана.

**Календарь- тематик планлаштырыу. 11кл**

| № | Дәрес темаһы | Дата | Фактик дата | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|
| 1 | Рәүеш. Рәүештәрҙең телмәрҙә ҡулланылышы. | 8.09 | | |
| 2 | Ярҙамсы һүҙҙәр. Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы. | 15.09 | | |
| 3 | Бәйләүестәр.Теркәүестәр. | 22.09 | | |
| 4 | Модаль һүҙҙәр,телмәрҙә ҡулланылышы. | 29.09 | | |
| 5 | Ымлыҡтар, оҡшатыу, саҡырыу һүҙҙәре. Уларҙың телмәрҙә ҡулланышы. | 6.10 | | |
| 6 | Диктант “Урманда”. | 20.10 | | |
| 7 | Синтаксистың берәмектәре.Һүҙбәйләнеш. Синтагма. | 10.11 | | |
| 8 | Һөйләм.Һәйләмдең телмәрҙә урыны. | 17.11 | | |
| 9 | Һөйләмдә һүҙ тәртибе. | 24.11 | | |
| 10 | Ике составлы һөйләмдәр. | 1.12 | | |
| 11 | “Һаҡсы” Биремле диктант. | 8.12 | | |
| 12 | Изложение. | 15.12 | | |
| 13 | Һөйләмдең баш киҫәктәре. | 22.12 | | |
| 14 | Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре. | 29.12 | | |
| 15 | Т/ү “Тыуған яғым-бергәнәм”. Инша | 12.01 | | |
| 16 | Хаталар өҫтөндә эш. Тиң киҫәктәр. Уларҙың телмәрҙә ҡулланылышы. | 19.01 | | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 17 | Айырымланған эйәрсән киҫәктәр. Хәл әйтеме һәм уның айырымланыуы. | 26.01 | | |
| 18 | Бер составлы һөйләмдәр. | 2.02 | | |
| 19 | Изложение. | 9.02 | | |
| 20 | Тулы һәм кәм һөйләмдәр. | 16.02 | | |
| 21 | Инша “Ҡар яуғанда”. | 2.03 | | |
| 22 | Һөйләм киҫәктәре менән грамматик бәйләнеше булмаған һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр. | 16.03 | | |
| 23 | Ҡушма һөйләм. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр. | 23.03 | | |
| 24 | Диктант “Һаҡсы”. | 6.04 | | |
| 25 | Хаталар өҫтөндә эш. Эйәрсән һөйләмдәрҙең баш һөйләмгә бәйләнеп килеү саралары. | 13.04 | | |
| 26 | Эйәрсән һөйләмдәрҙең баш һөйләмгә бәйләнеп килеү саралары. | 20.04 | | |
| 27 | Тексты редакторлау. Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр | 27.04 | | |
| 28 | Мәҡәлә яҙыу.”Әгәр мин етәксе булһам”. | 4.05 | | |
| 29 | Диктант “Күҙ алдында яңы көн тыуа…”. | 18.05 | | |
| 30 | Тура телмәр менән ситләтелгән телмәр. | 25.05 | | |
| 31-33 | Резерв* | | | |

*13.11, 23.12, 9.03, 11.05 – ял һәм байрам көндәренә тура килә.

**Әҙәбиәт.**


1. “Әсә теле” дәреслеге. 10-11 синыфтар. Төҙөүселәр: Псәнчин В.Ш., Псәнчин Ю.В. - Өфө:Китап, 2017.
2. Газета-журналдар: «Башҡортостан уҡытыусыһы» , «Йәшлек».
3. Башҡорт телендәге сайттар.

Муниципальное бюджетное общеобразовательное учреждение
средняя общеобразовательная школа села Комсомольск
муниципального района Учалинский район Республики Башкортостан

Рассмотрено:
руководитель ШМО
______ Бахтиярова Г.Х.
Протокол №1____
от «28» августа 2025г.

Согласовано:
зам.директора по УВР
______________________
Гайсин А.Ш.
«28» августа 2025г.

Утверждаю
директор МБОУ СОШ
с.Комсомольск _________
Г.З.Вильданова
Приказ № 135
«1» сентября 2025г.

**Рабочая программа**

По предмету родной (башкирский) язык

Классы 5-11

Учебный год 2025- 2026

Учитель Бахтиярова Г. Х., Рахматуллина А.Н.